1. Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре тураһында төшөнсә, уларҙың үҙ аллы һүҙ төркөмдәренән айырмаһы.
2.Теркәүестәр. Составы буйынса теркәүестәрҙең бүленеше: ябай һәм ҡушма теркәүестәр. Мәғәнәләре буйынса теркәүестәрҙең бүленеше: теҙеүсе һәм эйәртеүле теркәүестәр. Теҙеүсе теркәүестәрҙең төркөмдәре: йыйыу, ҡаршы ҡуйыу, бүлеү, аныҡлау теркәүестәре. Эйәртеүле теркәүестәрҙең төркөмдәре: шарт, сәбәп, һөҙөмтә, оҡшатыу теркәүестәре.
3.Бәйләүестәр. Бәйләүестәрҙең телмәрҙәге функцияһы. Бәйләүестәрҙең бүленеше: төп йәки эйәлек килештәге һүҙҙәр менән килгән бәйләүестәр, төбәү йәки төп килештәге һүҙҙәр менән килгән бәйләүестәр.
4.Киҫәксәләр. Киҫәксәләрҙең телмәрҙәге функцияһы. Киҫәксәләрҙең бүленеше: һорау киҫәксәләре, көсәйтеү-раҫлау киҫәксәләре, икләү киҫәксәләре.
5.Модаль һүҙҙәр. Модаль һүҙҙәрҙең мәғәнәләре. Модаль һүҙҙәрҙең килеп сығышы һәм уларҙың синтаксик функциялары.
6.Ымлыҡтар. Ымлыҡтарҙың телмәрҙәге функцияһы. Ымлыҡтарҙың бүленеше һәм дөрөҫ яҙылышы.
7.Оҡшатыу һүҙҙәре тураһында дөйөм төшөнсә. оҡшатыу һүҙҙәренең төҙөлөшө һәм уларҙың синтаксик функциялары.

**Занятие 10.** Синтаксис. Пунктуация.
1. Һүҙбәйләнеш. Теҙмә һәм эйәртеүле һүҙбәйләнеш.
2. Эйәртеүле һүҙбәйләнештә һүҙҙәрҙең синтаксик бәйләнеш юлдары.

**Занятие 11 - 12.** Ябай һөйләм синтаксисы.
1. Ике составлы һөйләм.
2. Баш һәм эйәрсән киҫәктәр.
3. Бер составлы һөйләмдәр.Бер составлы һөйләмдәрҙең төрҙәре.
4. Тиң киҫәкле һөйләмдәр.
5. Айырымланған эйәрсән киҫәкле һөйләмдәр.

**Занятие 13.** Ҡушма һөйләм синтаксисы.
1. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләм.
2. Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләм.
3. Теҙмә ҡушма һөйләм өлөштәре араһында тыныш билдәләре.

**Занятие 14 - 16.** Эйәртеүле ҡушма һөйләм.
1. Баш һәм эйәрсән һөйләм.
2. Эйәрсән һөйләмдәрҙең төрҙәре.
3. Эйәртеүле ҡушма һөйләмдә тыныш билдәләре.

**Занятие 17 - 18.** Ҡатмарлы синтаксик конструкциялар.
**1.** Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр, уларҙа эйәртеүле бәйләнеш ысулдары.
**2.** Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.
**3.** Тура телмәр менән ситләтелгән телмәр.

**4.** Тура телмәрҙә тыныш билдәләре.

**Критерии оценки (в баллах):**

| Количество баллов | Критерии оценивания на вопросы для аудиторной работы |
|---|---|
| 2 | При ответе студент демонстрирует свободное владение заявленной проблемой, умение грамотно использовать физический понятийный аппарат в рамках рассматриваемого вопроса, не использует конспект семинарского занятия как план при ответе. |
| 1 | При ответе на вопрос студентом допущено несколько существенных ошибок в толковании основных понятий. Логика и полнота ответа страдают заметными изъянами. Имеются принципиальные ошибки в логике построения ответа на вопрос. |
| 0 | Дан в целом неверный ответ |

**Задания для контрольной работы**

**Контрольная работа № 1.**

1. Күрһәтелгән һүҙҙәргә морфологик анализ яһарға, һүҙ составын билдәләргә.

*Күп тә үтмәне, ҡайҙандыр ҡалҡып сығып өлгөргән вак болоттар, бергә ҡушылып, ер тетрәтергә, уттарын сәсергә тотондолар.* (И. Насыри).

2. Бер ҡушма һан алып, унан мөмкин тиклем төрлө юл менән яһалған сама һандары яҙығыҙ.

3. Ике төп (хәл) һәм ике ваҡыт рәүеше алып, уларҙың дәрәжә формаларын яҙығыҙ, бер-икеһе менән һүҙбәйләнеш төҙөгөҙ.

4. «Туғандар» һүҙен эйәлек категорияһы затының берлек һәм күплек формаларында үҙгәртергә.

5. Сифат урынында ҡулланылыусы күрһәтеү алмаштары менән ике һөйләм яҙығыҙ.

**Контрольная работа № 2.**

1. Күрһәтелгән һүҙҙәргә морфологик анализ эшләгеҙ.

*Беҙҙең быуын өсөн Ватан тағы шуға икеләтә ғәзиз: уның именлеге өсөн күп атайҙар менән ағайҙар ғүмерҙәрен бирҙеләр.* (М.Кәрим).

2. Бер сама һаны менән ҡушма уртаҡлыҡ исемдән һүҙбәйләнеш төҙөп, килеш менән үҙгәртегеҙ.

3. Эйәлек категорияһының III зат формаһындағы бер һорау алмашын эйәлек һәм төбәү килештәрҙә алып,берәр һөйләм яҙығыҙ.

4. Тамыр, яһалма һәм парлы рәүештәргә икешәр ми1ал яҙып, уларҙың ниндәй мәғәнәүи төркөмгә ҡарағанлығын әйтегеҙ, берәүһенең дәрәжә формаларын бирегеҙ.

5. Коллектив (төркөмлө) күплекте аңлатыусы исем менән һөйләм яҙығыҙ.

**Контрольная работа № 3.**

1. Күрһәтелгән һүҙҙәргә морфологик анализ эшләгеҙ.

*Нисектер ҡыҙыңдың исеме,*
*Белмәйем, ҡорҙаш, уны;*
*Тик беләм: ул - алма битле,*
*Һәм бик бәләкәй ҡулы.*

(Р.Ниғмәти).

2. Предметтың, хәл – күренештең билдәле бер урынға һәм ваҡытҡа ҡарағанлығын белдереүсе икешәр сифат яҙығыҙ. Уларҙың ниндәй сифат икәнен әйтегеҙ.

3. Төрлө юл менән яһалған ҡ юҡлыҡ алмашы яҙығыҙ, береһен килеш менән үҙгәртегеҙ.

4. Нумератив һүҙҙәр менән биш һүҙбәйләнеш яҙығыҙ.

5. «Ҡәнәғәт» һүҙен хәбәрлек категорияһының зат формаларында яҙығыҙ, береһе менән һөйләм төҙөгөҙ.

**Критерии оценки (в баллах):**

| Критерии оценивания контрольной работы | Количество баллов |
|---|---|
| Студент выполнил работу без ошибок и недочетов; допустил не более одного недочета | 5 |
| Студент выполнил работу полностью, но допустил в ней не более одной негрубой ошибки и одного недочета или не более двух недочетов; | 4 |
| Студент правильно выполнил не менее половины работы или допустил: не более двух грубых ошибок; или не более одной грубой и одной негрубой ошибки и одного недочета; или не более двух-трех негрубых ошибок; или одной негрубой ошибки и трех недочетов; или при отсутствии ошибок, но при наличии четырех-пяти недочетов; | 3 |
| Студент правильно выполнил менее половины работы | 2 |

## Работа при обсуждении вопросов аудиторной работы
## Модуль 1. Фонетика башкирского языка
### Фонетик анализ

Ф о н е т и к а н а л и з – телмәр өндәренә характеристика биреү ул. Унда өдәр яһалыу рәүеше, урыны, уларҙың яһалышында тауыштың ҡатнашы, шулай уҡ телмәр ағзаларының ҡатнашы һәм торошо буйынса тикшерелә.

**Һүҙгә фонетик анализ яһау тәртибе**

**1.** Һүҙҙең баҫымын ҡуйырға; анализлана торған һүҙҙе ижектәргә бүлеп, баҫымлы һәм баҫымһыҙ (булһа) ижектәрҙе күрһәтергә; асыҡ һәм ябыҡ ижектәрҙе билдәләргә.

**2.** Һүҙҙең нисә хәрефтән һәм нисә өндән тороуын әйтергә, уларҙың мөнәсәбәтен асыҡларға (бер нисә өндө белдергән *я, ю, е, е* һәм өндәрҙе белдермәгән *ъ, ь* хәрефтәренә иғтибар итергә).

**3**. Был һүҙҙә ниндәй фонетик күренештәр сағылыуын (сингармонизм һәм уның төрҙәре, һуҙынҡылар һәм тартынҡылар өлкәһендәге үҙгәрештәр) күрһәтергә.

4. Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәргә характеристика бирергә.

**Һуҙынҡы өнгә анализ яһау схемаһы:**

**1.** Әгәр һүҙ үҙләштерелгән булһа, рус теленән йәки рус теле аша башҡа телдән ингән һуҙынҡымы икәнен әйтергә.

**2.** Телдең горизонталь хәрәкәте буйынса ниндәй һуҙынҡы икәнен билдәләргә:

а) алғы рәт һуҙынҡылары: [е], [э], [и], [ә], [ө], [ү];

б) артҡы рәт һуҙынҡылары: [ а], [ы], [ы$^{и}$], [о°], [о], [у].

**3.** Телдең вертикаль хәрәкәте буйынса ниндәй һуҙынҡы икәнен билдәләргә:

а) өҫкө күтәрелеш һуҙынҡылары (тар һуҙынҡылар): [и], [ы$^{и}$], [у], [ү];

б) урта күтәрелеш һуҙынҡылары (ярым тар һуҙынҡылар): [о°], [о], [ө], [ы], [е], [э];

в) түбән күтәрелеш һуҙынҡылары (киң һуҙынҡылар): [а], [ә].

**4.** Ирендәрҙең ҡатнашлығы буйынса ниндәй һуҙынҡы икәнен билдәләргә:

а) иренләшкән һуҙынҡылар: |о°], [о], [ө], [у], [ү];

б) иренләшмәгән һуҙынҡылар: [а], [ә], [ы], [ы$^{и}$], [е], [э], [и].

**5.** Ҡалын һуҙынҡымы, нәҙек һуҙынҡымы икәнен асыҡларға.

**Тартынҡы өнгә анализ яһау схемаһы:**

**1.** Төп башҡорт тартынҡыһымы, әллә үҙләштерелгәнме? Әгәр һүҙ үҙләштерелгән булһа, рус теленән йәки рус теле аша башҡа телдән ингән тартынҡымы икәнен әйтергә:

а) төп башҡорт теле тартынҡылары: [б] ,[п], [д], [т], [ҡ], [к], [ҙ], [ҫ], [с], [ш], [г], [ғ], [һ], [v], [й], [л], [м], [н], [ң], [р] - 20 тартынҡы;

б) башлыса ғәрәп, фарсы һәм рус телдәренән ингән һүҙҙәрҙәге тартынҡылар: [ф], [х], [ж], [з], ['], [в], [ц], [ч], [щ] — 9 тартынҡы ([х], [ж], [з] тартынҡылары төп башҡорт һүҙҙәрендә лә осрай).

**2.** Яһалыу рәүеше буйынса ниндәй тартынҡы икәнен билдәләргә:

а) шартлаулы: [б], [п], [д], [т], [г], [к], [ғ], [ҡ], ['] - 9 тартынҡы;

б) ышҡыулы (фрикатив): [в], [ф], [з], [с], [ҙ], [ҫ], [ж], [ш], [щ], [х], [һ], [й], [v] - 13 тартынҡы;

в) ҡуш тартынҡылар (аффрикаттар): ц-[$^{т}$с], ч-[$^{т}$ш] – 2 тартынҡы;

г) танау һәм тел эргәһе тартынҡылары: [м], [н], [ң], [л] – 4 тартынҡы;

д) ҡалтыраулы тартынҡы (вибрант): [р] – 1 тартынҡы.

**3.** Яһалыу урыны буйынса ниндәй тартынҡы икәнен билдәләргә:

а) ирен тартынҡылары: [б], [п], [в], [ф], [м], [v] – 6 тартынҡы;

- ике ирен тартынҡылары: [б], [п], [м], [v];
- ирен-теш тартынҡылары: [в], [ф];

б) тел алды тартынҡылары: [д], [т], [з], [с], [ҙ|, [ҫ], [ц], [ж], [ш], [щ], [ч], [л], [н], [р] – 14 тартынҡы;

- тел алды-теш тартынҡылары: [д], [т], [з], [с], [ц], [л], [н];
- тел алды-теш араһы тартынҡылары: [ҙ|, [ҫ];
- тел алды- алғы аңҡау тартынҡылары: [ж], [ш], [ч], [щ], [р];

в) тел уртаһы-аңҡау тартынҡылары: [й], [к], [г] – 3 тартынҡы;

г) тел арты-аңҡау тартынҡылары: [ҡ], [ғ], [х], [ң] – 4 тартынҡы;

д) тамаҡ тартынҡылары: [һ], ['] – 2 тартынҡы;

- тамаҡ тартынҡыһы (фарингаль) [һ];
- тамаҡ төбө тартынҡыһы: ['].

**4.** Тауыш һәм шау ҡатнашлығы буйынса ниндәй тартынҡы икәнен билдәләргә:

а) шаулы тартынҡылар: [б], [п], [в], [ф], [д], [т], [ғ], [ҡ], [г], [к], [ҙ], [ҫ], [з], [с], [ж], [ш], [щ], [ч], [н], [х], [һ], ['] – 22 тартынҡы;

б) талғын тартынҡылар: [й], [л], [м], [н], [н], [р], [v] – 7 тартынҡы (*йырлауыныңмы* [йырлаvыныңмы]).

**5.** Яңғырау тартынҡымы, һаңғырау тартынҡымы икәнен
билдәләргә:

а) яңғырау тартынҡылар: [б], [в], [д], [г], [ғ], [ж], [з], [ҙ], [й], [л], [м], [н], [ң], [р], [v] – 15 тартынҡы;

б) һаңғырау тартынҡылар: [п], [ф], [т], [к], [ҡ], [ш], [с], [ҫ], [х], [һ], [ч], [щ], [ц], ['] – 14 тартынҡы.

**6.** Парлы тартынҡымы, парһыҙ тартынҡымы икәнен асыҡларға:

а) парлы тартынҡылар: [б] - [п], [в] - [ф], [г] - [к], [ғ] - [ҡ], [д] - |т], [ж] - [ш], [з] - [с], [ҙ] - [ҫ].

б) парһыҙ тартынҡылар:

- сонорҙар: [й], [л], [м], [н], [ң], [р], [v];
- һаңғырау тартынҡылар: [х], [һ], [ч], [щ], [ц], ['].

**Фонетик анализ яһау өлгөһө**

*Юлдар* Һүҙе ике ижектән тора: *юл-дар,* икеһе лә ябыҡ ижектәр. Баҫым икенсе ижеккә төшә.

*Юлдар* һүҙе алты өндән – [й], [у], [л], [д], [а], [р]; биш хәрефтән тора: *ю, л, д, а, р.*

Түбәндәге фонетик күренештәр күҙәтелә:

- аңҡау гармонияһы: тамырҙа ла, ялғауҙа ла [у], [а] артҡы рәт һуҙынҡылары килә;
- Һуҙынҡылар менән тартынҡыларҙың гармонияһы: [у], [а] ҡалын һуҙынҡылары янында [й], [л], [д], [р] тартынҡыларының веляр (ҡалын) варианттары килә;
- прогрессив ассимиляция: [лд] *юл-дар.*

[й] – төп башҡорт теле тартынҡыһы, яһалыу рәүеше буйынса ышҡыулы (фрикатив), яһалыу урыны буйынса тел уртаһы-аңҡау тартынҡыһы, тауыш һәм шау ҡатнашлығы буйынса талғын, парһыҙ тартынҡы;

[у] – һуҙынҡы өн, телдең горизонталь хәрәкәте буйынса артҡы рәт, телдең вертикаль торошо буйынса өҫкө күтәрелеш һуҙынҡыһы, иренләшкән, ҡалын һуҙынҡы;

[л] – төп башҡорт теле тартынҡыһы, тел эргәһе, тел алды-теш тартынҡыһы, талғын, парһыҙ тартынҡы;

[д] – төп башҡорт теле тартынҡыһы, шартлаулы, тел алды-теш тартынҡыһы, шаулы, парлы, яңғырау тартынҡы, һаңғырау пары – [т];

[а] – артҡы рәт, түбән күтәрелеш һуҙынҡыһы, иренләшмәгән, ҡалын һуҙынҡы;

[р] – төп башҡорт теле тартынҡыһы, ҡалтыраулы, тел алды-аңҡау тартынҡыһы, талғын, парһыҙ тартынҡы.

*Ята* һүҙе ике ижектән тора: *я-та,* икеһе лә асыҡ ижектәр. Баҫым икенсе ижеккә төшә.

*Ята* һүҙе дүрт өндән - [й], [а], [т], [а]; өс хәрефтән тора: *я, т, а.*

Фонетик күренештәрҙән сингармонизм законы күҙәтелә:

- аңҡау гармонияһы: тамырҙа ла, ялғауҙа ла [а] артҡы рәт һуҙынҡыһы килә;
- Һуҙынҡылар менән тартынҡыларҙың гармонияһы: [а] ҡалын һуҙынҡылары янында [й] һәм [т] тартынҡыларының веляр (ҡалын) варианттары килә.

[й] – төп башҡорт теле тартынҡыһы, ышҡыулы, тел уртаһы-аңҡау тартынҡыһы, талғын, парһыҙ тартынҡы;

[а] – артҡы рәт, түбән күтәрелеш һуҙынҡыһы, иренләшмәгән, ҡалын һуҙынҡы.

[т] – төп башҡорт теле тартынҡыһы, шартлаулы, тел алды-теш тартынҡыһы, шаулы, һаңғырау, парлы тартынҡы, яңғырау пары – [д].

## ◆ Практик эштәр өсөн күнегеүҙәр

✍ **3-сө күнегеү.** Билдәләнгән һүҙҙәргә фонетик анализ яһағыҙ.

1. *Һуҡмағыҙ телде ҡалыпҡа,*
*Тел ҡалып һөймәй улай.*
*Тел көсө – **даръя** көсө ул –*
*Һыуға бай, тулҡынға бай.*
*Һәр йылы ямғыр нисек*
*Даръяға өҫтәй һыуҙар,*
*Телде нәҡ даръя кеүек,*
*Үҫтерә яңы һүҙҙәр.*

(Әбүс.)

2. *Талғын иҫкән ел түбәндән урыҡ-һурыҡ йыр ауаздарын **юлаусыларға** килтереп еткерҙе.* (С. Шәрипов.) 3. *Иң онотолмаҫы, Дәүләттең күңелендә уға ҡарата юйылмаҫ нәфрәт тыуҙырғаны, мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ **етенсе** йылдың яҙында булған хәл ине.* (Н. Мусин.) 4. *Фәрүкшаның ҡыйыулығы ла, **шаянлығы** ла, телгә оҫталығы ла етерлек.* (С. Поварисов.) 5. “*Беҙҙең **икебеҙҙең** дә яҙмыш бер бит, **маъмай**,” – тигән тауышын ғына яҙа-йоҙа ишеттем.* (Н. Мусин.) 6. *Был һүҙҙәрҙе ул **мәсьәләгә** битараф кеше кеүегерәк әйтте.* (С. Поварисов.) 7. *Инженер Зилара, следователь Баныу Мәхмүтовна эргәһенә*

*барып, уның ауыҙынан улының **фажиғәле** яҙмышы хаҡында ишеткәс, үҙенең мәңге юйылмаҫлыҡ хата эшләгәнен аңланы.* (Х. Зарипов.) 9. *Ауыр һуғыштан һуң – был ҡырҡ дүртенсе йылда Карель **муйынында** булды – бейеклек өсөн алышта батальон тотошлайы менән уның ташлы **битләүендә** ятып ҡалғас, беҙ, ниндәйҙер мөғжизә арҡаһында ғына тере ҡалған һәм арыуҙан **аяҡтарҙы** саҡ һөйрәгән егермеләп кеше, бәрелеш ваҡытында күҙәтеү пунктын үтәгән ҙур таш артына кире әйләндек.* (Т.Ғиниәтуллин.) 10. ***Урьяҡ** туғайҙы ҡыҙыл сәкмән булып япҡан ер еләге, ҡыҙҙар тауы **итәгендә** бешкән сейә, Оло Эйек **таллығындағы** ҡара ҡарағат, ҡыҙыл, аҡ ҡарағаттар уға йән, йәм өҫтәне, ҡыҙған ҡырсынташтарында йөрөү, ҡаймаҡ шикелле **йомшаҡ** эҫе ҡомда аунау, шаян тулҡындар менән ярышып, йылғаны арҡыры-буйға иңләп йөҙөү Емеш өсөн иҫ киткес тылсымлы байрам булды.* (З. Биишева.)

## ФОНЕТИК ТРАНСКРИПЦИЯ

**☞ Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ! ☜**

- **Орфоэпия тураһында** дөйөм төшөнсә.
- Хәҙерге башҡорт теленең орфоэпик нормалары.
- **Фонетик транскрипция** һәм уның тамғалары.
- Орфографияның әҙәби телдең дөрөҫ әйтелеш нормаларына йоғонтоһо.

### Фонетик транскрипция

Ф о н е т и к  т р а н с к р и п ц и я (лат. “күсереп яҙыу”) – һөйләү телмәренең үҙенсәлектәрен күрһәтеү өсөн тәғәйенләнгән яҙыу төрө. Транцкрипция тел ғилемендә төрлө фонетик күренештәрҙе (өндәр системаһы, уларҙың үҙгәреше, әйтелеш үҙенсәлектәре һ.б.), һөйләш һәм диалекттарҙы, шулай уҡ сит телдәрҙе өйрәнгәндә ҡулланыла.

Ғәҙәттәге орфографик яҙыу аша һөйләү телмәрен бөтә нескәлектәрен тулыһынса биреп еткереп булмай, сөнки телдәге бөтә өндәр өсөн дәграфикала тейешле хәрефтәр һәм тамғалар етешмәй. Фонетик транскрипция алфавиттағы булған хәрефтәрҙән тыш өҫтәлмә диакритик (гр. “айырмалы”) тамғалар һәм яңы хәрефтәр алыу, ҡайһы бер хәрефтәрҙе, кирәкһенсә, төшөрөп ҡалдырыу юлы менән тоормошҡа ашырыла.

Фонетик транскрипцияның төп принцибы телдәге һәр өндө тейешле бер хәреф һәм тамға менән билдәләүҙән тора.

### Башҡорт телендә ҡулланылған фонетик транскрипция тамғалары

1. Хәреф тик бер өндө генә аңлата.

2. Һәр өн тик бер генә хәреф менән күрһәтелә.

3. Транскприпцияланған текста өндө белдермәгән хәрефтәр һәм, кирәкһенсә, билдәле бер тамға ҡабул итмәгән өндәр булмай.

4. Баш хәрефтәр ҡулланылмай.

5. Тыныш билдәләре ҡуйылмай. Улар урынына пауза тамғалары ҡулланыла:

/ – бер вертикаль һыҙыҡ – бәләкәй паузалар өсөн

// – ике вертикаль һыҙыҡ – ҙур паузалар өсөн

– дуға – ике һүҙ паузаһыҙ, бер интонация менән әйтелгәндә;

һорау һәм өндәү билдәләрен ҡалдырырға мөмкин.

6. Баҫым билдәһе һәр саҡта ла ҡуйыла; төп баҫым бер ҡыя һыҙыҡ менән, өҫтәлмә баҫым ике ҡыя һыҙыҡ менән күрһәтелә: [бала́], [ҡӳлйаҙма́].

7. Транскрипцияланған телмәр өлөшө – өн, өндәр ҡушылмаһы, ижек, һүҙ, һүҙбәйләнеш, һөйләм, фраза, текст – квадрат йәйәләр эсенә алына: [v]аҡыт, [йа]лҡын, [йуғары].

8. Нәҙек әйтелгән тартынҡыларҙы күрһәтеү өсөн хәрефтең уң яҡ башына өтөр билдәһе (апостроф) ҡуйыла: [ҡул], [к'үл'|.

9. Ыштҡыулы тел уртаһы тартынҡыһы й (йот) өнө ғәҙәттәге й хәрефе менән белдерелә: [байрам], [йапраҡ], [өй].

10. Фонетик транскрипцияла я, ю, е, е хәрефтәре ҡулланылмай, улар түбәндәгесә күрһәтелә:

я – [йа]: ялан [йалан], ю – [йу]: юрға [йурға],

я – [а]: Аляска [ал'а'скъ]; ю – [у|: костюм [каст'ум];

ё – [йо]: елка [йолкъ], е – [йе]: емеш [йемеш],

ё – [о]: актер [акт'ор]; е – [э]: тема [т'эмъ].

11. Төп башҡорт һүҙҙәрендәге һуҙынҡылар өсөн ғәҙәттәге а, ә, ы, и, о, ө, у, ү, е хәрефтәре ҡулланыла, тик рус теленән ингән өндән айырыу өсөн, башҡорт телендәге [о] өнөн белдергәндә, хәреф өҫтөнә уң яҡтан иренләшеү тамғаһы (бәләкәй түңәрәк) ҡуйыла - [о°]: болотло – [бо°ло°тло°].

12. Рус теленән ингән һүҙҙәрҙәге [о] өнө өсөн ғәҙәттәге о хәрефе – [о]; [ы] өнө өсөн өҫтән уң яғында бәләкәй и хәрефе булған ы хәрефе – ы[и]; [э] өнө өсөн э хәрефе алына – [э]: спорт [спорт], вышка [вы[и]шкъ], эпос [эпъс], электр [элэктр].

13. ъ һәм ь хәрефтәре рус теленән ингән һүҙҙәрҙәге редукцияға бирелгән ҡыҫҡа әйтелешле баҫымһыҙ һуҙынҡыларҙы белдереү өсөн ҡулланыла, бындай өндәр баҫым алдындағы икенсе, өсөнсө һ.б. баҫымһыҙ ижектәрҙә әйтеләләр: атом [атъм], бульдозер [бул'доз'ьр), карта [картъ].

14. Рус теленән ингән һүҙҙәрҙә редукцияға бирелгән баҫымһыҙ һуҙынҡылар беренсе баҫым алдындағы беренсе ижектә һәм һүҙ башында торғанда түбәндәгесә белдерелә:

баҫым алды [а] фонемаһының варианты – өҫтөнә ҡыйыҡса ҡуйылған а хәрефе менән – â: завод [зâвот], атлетика [âтл'этикъ];

баҫымһыҙ [о] фонемаһының варианты ғәҙәттәге а хәрефе менән: совет [сав'эт], окоп [акоп];

баҫымһыҙ [э] фонемаһының варианты өҫтән уң яғында бәләкәй и хәрефе булған э хәрефе менән – [э[и]]: рекорд [р'э[и]корт], эскорт [э[и]скорт].

15. Ыштҡыулы, ике ирен тартынҡыһы [уау] өнө өсөн латин алфавитынан v хәрефе алына: васыят [vасыйат], ваҡ [vаҡ], бау [баv], икәү [ик'әv] .

16. Шартлаулы, тамаҡ төбө тартынҡыһы юл өҫтөндәге өтөр (апостроф) менән билдәләнә: маъмай [ма'май], тәьмин [тә'мин].

17. Рус теленән ингән һүҙҙәрҙәге [ц], [ч], [щ] өндәре өлөштәргә тарҡатылмайынса ц, ч, щ хәрефтәре аша бирелә.

### Фонетик транскрипция яһау өлгөһө

*Тел кешеләрҙең коллектив хеҙмәте барышында уларҙың бер-береһенә нимәлер әйтергә теләү ихтыяжы, мохтажлығы арҡаһында барлыҡҡа килгән. Телдең төп функцияһы ла шунан сығып асыҡлана. Тел – кешеләрҙең аралашыуы өсөн иң кәрәкле ҡорал. Бынан тыш, тел йәмғиәттә тағы ла күп функция башҡара.*

[т'ел' / к'еш'ел'әр'ҙ'ең' кâл'э[и]кт'иф х'еҙ'м'әт'е варышында / уларҙың б'ер' в'ер'еһ'ен'ә н'им'әл'ер' әйт'ер'г'ә т'ел'әv ихтыйажы // мо°хтажлығы арҡаһында варлыҡа г'ил'г'ән' // т'ел'д'ең' т'өп' функцийаһы ла / шунан сығыв асыҡлана //т'ел' / к'еш'ел'әр'ҙ'ең' аралашыvы өс'өн' иң' г'әр'әк'л'е ғо°рал // бынан тыш // т'ел' йәмғийәт'ә / тағы ла к'үп' функция вашҡара //]

### ◆ Практик эштәр өсөн күнегеүҙәр

✍ **4-се күнегеү.** Бирелгән текстарға фонетик транскрипция яһағыҙ.

1. *Ә бында төрлө яҙмышлы кешеләр, икеләнеүҙең файҙаһы юҡ. Йөрәгең, намыҫың ҡушҡанса эшләргә кәрәк. Мәсьәләнең ҡара яғы – комбаттың яҙмышы өсөн ҡуркыу. Ул полкта иң көслө, абруйлы, башҡаларға өлгө булырҙай батарея командиры икәнлеген*

*тылда сакта ла, фронтта ла күрһәтеп өлгөргән. Ә ниңә бына ҡояштан да тап эҙләп маташҡан бер ҡарт һалдат өсөн ут йотоп йөрөргә лә ғүмереңде ҡурҡыныс ҡапҡаһы алдына терәп ҡуйырға?* (С. Поварисов.)

2. *Шәриф, шатлығынан ни эшләргә белмәй, өйгә ҡарап йүгерҙе, ҡайтышлай үҙҙәренә яҡын лавкanan ике ҡаҙаҡ икмәк менән бер ҡап шырпы алып ҡайтты. Тора торған фатиры ҡаланың ситендә булһа ла, ул бик тиҙ ҡайтып етте. Өйөнә барып кергән ваҡытта, гүйә, ҡатынына, балаларына маҡтанған кеүек, бына атайығыҙ малды шулай таба ул, сыҡһа, ала ла килә, тигән төҫлө, ҡулындағы әйберҙәрен һике өҫтөнә бушатып ташланы. Үҙе, бик ҙур бер бурыстан ҡотолған, өҫтөнән тау кеүек ауырлыҡты алып ташлаған кеше кеүек, сәкмәнен сисеп, көлдәксән генә ҡалды.* (М. Ғафури.)

3. ... *«Сиҙәм» совхозы эшселәре күл буйына килгәндә, кешеләр артыҡ күп йыйылмағайны әле. Тик һабантуй үткәреүселәр, беләктәренә ҡыҙыл таҫмалар бәйләгән кешеләр генә, спорт ҡоролмалары тирәһендә сыуалалар, ағастарға флагтар эләләр, тегене-быны һатыу өсөн палаткалар ҡоралар һәм башҡа шундай әҙерлек эштәре менән ҡайнашалар ине...* (Ф.Әсәнов.)

## Модуль 2. Морфемика и словообразование башкирского языка

### Һүҙгә морфематик анализ яһау тәртибе:

1. Һүҙҙең телмәрҙә бирелгән формаһы алына.
2. Уның ҡайһы һүҙ төркөмөнә ҡарағанлығы әйтелә.
3. Һүҙҙең үҙгәртеүсе аффикстары табыла, уларҙың ниндәй грамматик категорияларҙы күрһәтеүе асыҡлана.
4. Форма яһаусы аффикстар табыла, уларҙың ниндәй лексик-грамматик категориялар яһауҙа ҡатнашыуы күрһәтелә.
5. Һүҙҙең нигеҙе билдәләнә, уның төрө (ябай, яһалма, ҡушма) әйтелә.
6. Һүҙҙең тамыры табыла.
7. Әгәр яһалма һүҙ булһа, һүҙ яһаусы аффикстар һәм уларҙың функциялары күрһәтелә.

**Өлгө:** *Тау **баштарындағы** ҡарҙар ирей башланы.*

***Баш/тар/ы/нда/ғы*** – сифат, яһалма һүҙ; үҙгәртеүсе аффикстар: ***-тар*** (күплек ялғауы), ***- ы*** (эйәлек категорияһының һ-сө затын күрһәтә), ***-нда*** (урын-ваҡыт килеш аффиксы); һүҙҙең нигеҙе - ***баш***, ул ябай нигеҙ; һүҙҙең тамыры - ***баш***, һүҙ яһаусы аффикс – -***ғы***, был осраҡта урын ваҡыт килештәге исемгә ҡушылып сифат яһаған.

### Һүҙьяһалыш буйынса анализ яһау схемаһы

1. Һүҙҙең башланғыс формаһы алына, ниндәй һүҙ төркөмөнә ҡарағанлығы әйтелә.
2. Яһалышы буйынса был һүҙҙең төрө (яһалма, ҡушма, парлы, ҡы1ҡартылған ҡушма, күсмә һүҙ) билдәләнә.
3. Был һүҙҙең яһаусы нигеҙе табыла; әгәр ул да яһалма һүҙ булып сыҡһа, анализ тамыр нигеҙ табылғансы дауам итә.
4. Һүҙҙең яһалыу юлы һәм уның ҡайһы төрө булыуы асыҡлана.

**Өлгө:** *ҡурҡыуҙан Мәүсиләнең йөҙө **ағарынды.***

***Аг/ар/ын/ды***

Бирелгән һүҙ: ***ағарынды***, ул – ҡылым, уның башланғыс формаһы: ***ағар-***; яһалышы буйынса ул – яһалма һүҙ; яһаусы нигеҙе – ***аҡ***; был һүҙҙең яһалышы морфематик юлдың аффикслашыу төрөнә ҡарай.

## Модуль 3. Морфология башкирского языка

1. **Бирелгән һүҙҙәрҙе тейешле формаларҙа үҙгәртегеҙ. Һөйләм төҙөгөҙ.**

*Йөрәк* – берлек һанда, эйәлек категорияһының 1-се зат берлеге, сығанаҡ килештә.

*Сәскә* - күплек һанда, эйәлек категорияһының 3-сө зат берлеге, төбәү килештә.

*Кеше* – күплек һанда, эйәлек категорияһының 2-се зат күплеге, төшөм килештә.

*Йондоҙ* – берлек һанда, эйәлек категорияһының 2-се зат берлеге, хәбәрлек категорияһының 1-се зат берлеге.

*Күҙ* – күплек һанда, эйәлек категорияһының 1-се зат берлеге, төбәү килештә.

*Юл* – күплек һанда, төп килештә.

*Моң* – берлек һанда, эйәлек категорияһының 3-сө зат берлеге, төшөм килештә.

*Шишмә* - берлек һанда, эйәлек категорияһының 3-сө зат берлеге, төп килештә.

2. **Бирелгән һүҙҙәрҙе килештә үҙгәртегеҙ:**

Киоск, митинг, танк, ландшафт, Кирилл, Минск, кросс, жюри, автомобиль, лагерь, кафе, Юлдашев, артист, Брест, меню, металлург, БР.

**3. Текстан сифаттарҙы табып, уларҙың дәрәжәләрен билдәләгеҙ.**

Ныҡлы кәүҙәһенә килешеп торған зәңгәрһыу төҫтәге плащының яғаһындағы урмансы петлицаһына өсәр эре йондоҙ беркуетелгән ир машинанан төштө. Яланбаш. Ҡап-ҡара ҡуйы сәстәре тигеҙ итеп ҡырлған ҡалын елкәһенә табан ишелеп-бөҙрәләнеп барып бөтә. Саҡ ҡына көмрөрәк тура танау, сирыш эҫәре булмаған ихтыяри йөҙ... (Н. Мусин.)

**4. Өҙөктән һандарҙы табып, төркөмсәләрен, яһалыштарын билдәләгеҙ. “Бер генә тапҡыр” һүҙбәйләнештәренең нисә тапҡыр һәм ни өсөн шул тиклем ҡабатланып килеүенең сәбәбен аңлатығыҙ.**

...Бер тапҡыр ҡалас ашау өмөтө менән беҙ егерме биш саҡрым ергә йәйәү барырға әҙербеҙ. Тамаҡ һаулыҡмы, ҡомһоҙлоҡмо, иҫәрлекме был? Әллә башҡа берәй нәмәме? Мин хәҙер үткән ғүмерҙең сал түбәһенән артҡа әйләнеп ҡарайым да шундай фекергә киләм: хикмәт беҙҙә, беҙҙең рухта булған. Ун михнәттең араһында бер рәхәттең ҡәҙерен, йөҙ әсенең эсендә бер татлының тәмен белеп үҫкәнбеҙ беҙ. Шуға күрә лә һуңыраҡ, башҡа аң, йөрәккә дәрт ингәс тә, беҙ әсәйҙәребеҙҙең бер фатихаһы хаҡына мең һынау үтергә әҙер булдыҡ; һөйгәндәребеҙҙең күҙҙәренә тик бер генә тапҡыр тултырып ҡарау өсөн, күкрәктәрҙәге асыҡ яраларҙы устарыбыҙ менән ҡыҫып, меңәр саҡрымлыҡ араларҙы араға һанамай, һуғыш яланынан бер генә көнгә, бер генә сәғәткә тыуған төйәктәребеҙгә ынтылдыҡ. Һәм, аҙаҡ килеп, Тыуған илдең бер генә ус тупрағы, бер генә тамсы һыуы, бер генә һулам һауаһы өсөн, Ватан ҡабул иткән саҡта, бөп-бөтөн көйө ғүмерҙәребеҙҙе бирҙек... (М.Кәрим)

**5. Түбәндә бирелгән нумератив һүҙҙәрҙе ҡулланып, һөйләмдәр төҙөгөҙ.**

Бәйләм, грамм, дана, киҫәк, күтәрем, ҡалаҡ, ҡарыш, ҡосаҡ, өйкөм, өйөм, саҡрым, телем, тотам, ус, һыныҡ, эҫкерт.

**6. *Кем, нимә, теге* алмаштарын күплектә килеш менән үҙгәртеп яҙығыҙ. Береһен эйәлек, икенсеһен сығанаҡ, өсөнсөһөн төшөм килештә килтереп, өс һөйләм төҙөгөҙ.**

**7. Түбәндәге ҡылымдарҙың башланғыс формаһын билдәләгеҙ:** алыҫайыу, асыу, баулау, бәхәсләшеү, инеү, йөрәкһеү, күгәреү, ҡулланыу, уҡыу, шатланыу, әйтеү, йылмайыу, көрһөнөү, ашығыу, уйлау, күрешеү, теҙләнеү.

**8. Ҡылымдарҙы тейешле грамматик категорияларҙа үҙгәртегеҙ, һөйләмдәр төҙөгөҙ.**

*Төш* – барлыҡта төп йүнәлештә хәбәр һөйкәлеше шаһитлы үткән заман 1-се зат берлектә.

*Кур* – бойороҡ һөйкәлеше 3-сө зат берлектә юҡлыҡта төп йүнәлештә.

*Көт* – шарт һөйкәлеше 2-се зат берлектә төп йүнәлештә

*Эҙлә* - хәбәр һөйкәлеше шаһитһыҙ үткән заман 2-се зат күплектә юҡлыҡта уртаҡлыҡ йүнәлешендә.

*Йырла* – үткән заман сифат ҡылым йөкмәтеү йүнәлешендә..

*Түҙ* – хәбәр һөйкәлеше билдәһеҙ киләсәк заман 1-се зат берлектә төп йүнәлештә.

*Укы* – юҡлыҡта хәбәр һөйкәлеше шаһитлы үткән заман 2-се зат күплектә йөкмәтеү йүнәлешендә.

*Йыу* – барлыҡта исем ҡылым ҡайтым йүнәлешендә.

*Ҡурҡ* – юҡлыҡта йөкмәтеү йүнәлешендә уртаҡ ҡылым.

*Һөйлә* - барлыҡта хәбәр һөйкәлеше хәҙерге заман 2 –се зат берлектә төп йүнәлештә.

**9. Текстан рәүештәрҙе һәм улар эйәреп килгән һүҙҙәрҙе табып, яҙып алығыҙ, һәр бер рәүештең ниндәй төркөмсәнән икәнен әйтегеҙ.**

Көн буйы яуған ямғыр кискә ҡарай ҡапыл туҡтаны. Китмәҫкә килгәндәй түшәлеп торған болоттар әллә ни арала таралып та өлгөрҙө. Зәңгәр күккә ҡояш яңынан хужа булды. Тик ҡайҙалыр бейектә аҙашып ҡалған һуңғы тамсылар һирәк-мирәк тамғылап ҡуя.

Өй янындағы бүрәнә өҫтөндә Айҙар менә Ғабдулла байтаҡтан бирле һүҙһеҙ ултыра. Малайҙарҙың кәйефе һүрән күренә. Эшһеҙ ҡалған кешеләр шундайырыҡ булалар шул.

Айҙар һеңлеһе Гөлнурҙы саҡырып алды ла Яҡупты тиҙ генә алып килергә ҡушты. Ялан аяҡтары менән бысраҡҡа сәпелдәтә-сәпелдәтә, Гөлнур Яҡуптарға ҡарай шәп итеп йүгерҙе.(М. Кәрим.)

**10. Күп нөктәләр урынына мөнәсәбәт һүҙҙәрҙе ҡуйып, тексты күсереп яҙығыҙ.**

Әле генә имән төбөндәге эскәмйәләрҙәге сүп-сарҙы һепереп ташланым, ..., был эште миңә анау күгәрсен күҙҙәре ҡушты. ..., башта уларҙың сафлығына һоҡланып ҡарап торҙом да, үҙем һиҙмәҫтән ҡулыма һепертке алдым. Һеперткегә мин былай һирәк тотонам. Донъя сүбен бер мин генә һепереп бөтөрә алмам, тим.

Ваҡ-төйәк нәмәләрҙең онотолмауы тураһындағы фекргә шуны өҫтәргә ...: күп йәһәттән хикмәт ваҡиғаларҙың ниндәй булыуында ..., һинең рухыңдың, аңыңдың, хәтерләү аппаратыңдың нисек, ниндәй тулҡынға көйләнеүендә. Улар бәғзе нәмәләрҙе ғүмерлеккә үҙләштереп ҡала, нимәләрҙелер үткәрә лә ебәрә. (М.Кәрим.)

**Критерии оценки (в баллах):**

| Критерии оценивания решения расчетных задач | Количество баллов |
|---|---|
| В логическом рассуждении и решении нет ошибок, задачи решены не менее 80%; | 3 |
| В логическом рассуждении и решении нет ошибок, задачи решены не менее 60%; | 2 |
| В логическом рассуждении и решении нет ошибок, задачи решены не менее 50%; | 1 |
| Имеются существенные ошибки в логическом рассуждении и в решении; отсутствует ответ на задание. | 0 |

## Решение индивидуального задания по модулям
## ФОНЕТИКА

Күрһәтелгән һүҙҙәргә фонетик анализ яһағыҙ.

1. – *Хужалыҡ һинең* ***елкәңдә*** *яткас, һин уны бөтә кәрәк-яраҡтар:* ***тракторҙар****, сәскестәр,* ***яғыулыҡ*** *менән* ***ваҡытында тәьмин*** *итергә тейешһең! – тип һүҙен башланы* ***Яубаҫаров.*** (Д. Буләков.) 2. ***Ҡояш*** *болоттар араһына инеп йәшенә лә ара-тарә йәнә килеп сыға һәм* ***һүрәнһеү*** *сыуағын ергә ташлай; шунан тағы* ***болотҡ****а ышыҡлана: сыуаҡ бөтә.* (Ж. Кейекбаев.) 3. *Зифа буйлы шыршы һәм ҡарағайҙарҙың, йылы көндө лә үҙ-ара серләшеүсе* ***елбәҙәк*** *уҫаҡ ағастарының, йәшел шәлен бөркәнгән ап-аҡ ҡайындарҙың, алҡа* ***таҡҡан*** *ерektәрҙең, суҡ-суҡ тәлгәшле миләш, муйыл, баландарҙың, йөҙйәшәр имәндәрҙең һәм сағандарҙың, таштан-ташҡа һикереп, сылтырап аҡҡан шишмәләрҙең,* ***томбойоҡло*** *һәм ҡамышлы күлдәрҙең, таҫма кеүек бормаланып аҡҡан йылғаларҙың, һандуғас моңона күмелгән туғайҙарҙың, әрәмәлектәрҙең* ***күркәмлеге*** *кеше ҡулында.* (Ә. Бикҡолов.) 4. *Мин*

*тәүҙә күҙем күреп,* ***ҡолағым*** *ишеткәндәрҙең* ***хаҡлығына*** *шикләнеп,* ***юғалып*** *ҡалдым.* (М. Кәрим.)

**2.** Әҙәби әҫәрҙән өҙөк алып, уға фонетик транскрипция яһағыҙ.

## ҺҮҘЬЯҺАЛЫШ ҺӘМ МОРФЕМИКА

**3.** Тамырҙаш һүҙҙәрҙе айырып яҙығыҙ.

1) емеш, емелдәй, ем, ем-ем итә, емешлек;
2) атһыҙ, аттар, атҡаҙанған, яҡшатланыу, атлай;
3) йырғанаҡ, йырлай, йырғыс, йырсы, йырылыу;
4) йыуғыс, йыуынты, йыуан, йыуһа, йыуантыҡ, йыуындыҡ;
5) аҡ, аҡһым, ағарыу, ағын, аҡһа;
6) ашамлыҡ, ашыҡ, ашлыҡ, ашығыс, ашлама;
7) балсыҡ, балғалаҡ, балан, балауыҙ, балланыу;
8) төш(көндөҙ), төшөнөү төшөү, төшлөк, төшөнкө, төшкөһөн;
9) үрләү, үртәү, үрҙә, үрт, үр;
10) алға, алырға, алдан, алғас, алмашыу.

**4.** Бирелгән һүҙҙәр рәтендә артыҡ һүҙҙе табығыҙ.

1) һана, һандар, иҫәпһеҙ-һанһыҙ, һандыҡ, һанағансы;
2) йәйенке, йәйләү, йәйгеһен, йәйләүес;
3) белем, белеш, белдереү, беләк, белдек;
4) күр, күргәҙмә, күрек, күренекле;
5) уйын, уйсан, уйҙар, уйлай;
6) теркәүес, терәтеү, терәк, терһәк;
7) көлкө, көләмәс, көлөмһөрәү, көлһыу, көләс;
8) еткер, етеш, етем, етлегеү, етте;
9) төшөм, төшөнкөлөк, төшлөк, төшөү, төшөргә;
10) еләҫ, елкән, елгәргес, еләк, елғыуар.

**5.** Һәр бер һүҙьяһалыш юлына художестволы әҙәбиәттән 10-ар миҫал табып яҙырға.

**6.** Эш, баш, бер һүҙҙәренән морфематик юл менән һүҙҙәр яһап яҙырға.

**7.** Һәр бер һүҙ төркөмөнә ҡараған продуктив һәм продуктив булмаған аффикстарҙы барларға.

**8.** *Морфематик (аффикслашыу, нигеҙҙәр ишләшеү), лексик, синтаксик юлдар менән белдерелгән күплек һанына нәфис әҙәбиәттән өсәр миҫал яҙығыҙ.*

Өлгө: Морфематик юл, аффикслашыу: **Ҡуяндар** өсөн барлыҡ **йәнлектәр** ҙә тик **йыртҡыстар** ғына булып күренәләр бит (Б.Бикбай).

Морфематик юл, нигеҙҙәр ишләшеү: Хәҙер ошо турала **ир-ат** йыйылышҡан ерҙә, **ҡатын-ҡыҙ** түңәрәкләшеп ултырған өйҙә төрлө хәбәрҙәр һөйләнә (Һ.Дәүләтшина).

Лексик юл: Магазиндың келәте насар булғанлыҡтан, йүнлерәк **тауарҙы** үҙенең олатаһынан ҡалған таш келәткә тултырып йоҙаҡлай торғайны (Г.Ғиззәтуллина).

Синтаксик юл: Ауылдан бер юлы **ун алты кеше** үҙе теләп отрядҡа инде (Һ.Дәүләтшина).

### Морфология

1. ***Халыҡ, ирек, милек*** *һүҙҙәренә эйәлек категорияһы ялғауҙары ҡушығыҙ, ялғау ҡушҡандағы үҙгәрештәрҙе аңлатығыҙ. Улар менән һөйләмдәр төҙөгөҙ.*

*2. Бирелгән һүҙҙәргә тейешле яһаусы ялғауҙар ҡушып, сифаттар яһағыҙ һәм улар менән һүҙбәйләнештәр төҙөгөҙ.*

Ҡар, күңел, төтөн, ҡояш, ел, болот, бөрө, ҡыш, кис, күҙ, оял, эйәр, һүҙ, түҙем, йыл, толоп, көн, ҡыҙған, һиҙ, ҡурҡ, ила, балыҡ, урман, айыу, өй.

*3. Боронғо үлсәү берәмектәренең мәғәнәһен аңлатығыҙ, уларға тура килгән бөгөнгө нумератив һүҙҙәрҙе яҙығыҙ. Нәфис әҙәбиәттән боронғо үлсәү берәмектәре менән һөйләмдәр табып яҙығыҙ.*

*Өлгө: 1 бот – 16 кг.*

Иле, ая, ҡарыш, аршын, сажин, арҡан, уҡ оҙонлоғо, аҙым, ҡолас, саҡрым, бот, ҡаҙаҡ, сирек, әсмуха, мысҡал, дисәтинә.

*4. Үҙе, һәр береһе, бөтәһе, кемдер алмаштарын килеш менән үҙгәртегеҙ. Шул алмаштарҙы төрлө килештә ҡуйып, бер нисә һөйләм уйлап яҙығыҙ.*

*5. Түбәндәге рәүештәрҙең семантик төркөмсәләрен билдәләгеҙ. Улар менән биш һөйләм төҙөгөҙ, рәүештәрҙең синтаксик функцияларына иғтибар итегеҙ.*

Әкрен, тиктомалға, оҙаҡ, юғары, быйыл, боронғоса, аяҡ өҫтө, яй, былтыр, юрый, юрамал, йәштәрсә, йәнәшә, тиҙ, ялан аяҡ, яҙын, байтаҡ, дәррәү, һирәк, байрамса, бая.

*6. Түбәндә бирелгән һүҙҙәрҙең йәйәләрен асып яҙығыҙ. Улар менән биш һөйләм төҙөгөҙ.*

Илке (һалҡы), шәп (шәп), йөҙ (түбән), был (йыл), ара (тирә), ялан (аяҡ), бары (бер), аҡса (лата), (бик) иртә, баш (түбән), (көпә) көндөҙ.

*7. Ахыры, белмәҫһең, билдәле, белмәйем, бар, ғөмүмән, эйе, юҡ һүҙҙәре инеш модаль һүҙ һәм һөйләм киҫәге булырлыҡ итеп һөйләмдәр төҙөгөҙ.*

Өлгө: Май сүлмәге тышынан <u>билдәле</u>. – <u>Билдәле</u>, Ташауыҙ промыслаһындағы эштәр былай ғына көйләнеп китерҙәй түгел.

**Критерии оценки (в баллах):**

| Критерии оценивания индивидуального задания | Количество баллов |
|---|---|
| Студент выполнил 2 задания без ошибок и недочетов; или допустил не более одного недочета | 2 |
| Студент правильно выполнил не менее половины работы или допустил: не более двух грубых ошибок; или не более одной грубой и одной негрубой ошибки и одного недочета; или не более двух-трех негрубых ошибок; или одной негрубой ошибки и трех недочетов; или при отсутствии ошибок, но при наличии четырех-пяти недочетов; | 1 |
| Студент правильно выполнил не менее половины работы и допустил более двух грубых ошибок. | 0 |

## Тестовые задания
## «Фонетика», «Орфография», «Графика» бүлектәре буйынса тест һорауҙары
### I вариант

1. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле орфографияһының төп принцибы булып ниндәй принцип тора?
1) морфологик принцип;

2) фонетик принцип;
3) тарихи-традицион принцип.
2. [у] фонемаһы телдең вертикаль торошо буйынса ҡайһы төргә ҡарай?
1) өҫкө күтәрелеш;
2) урта күтәрелеш;
3) түбәнге күтәрелеш.
*3.* [ә] фонемаһы телдең горизонталь торошо буйынса ҡайһы төргә ҡарай?
1) алғы рәт;
2) артҡы рәт;
3) урта рәт.
4. [ө] фонемаһы ирендәрҙең ҡатнашыу-ҡатнашмауы буйынса ҡайһы төргә ҡарай?
1) иренләшкән;
2) иренләшмәгән;
3) яртылаш иренләшкән.
5. [һ] фонемаһы тауыш һәм шауҙың ҡатнашыу-ҡатнашмау нисбәте буйынса ҡайһы төргә ҡарай?
1) талғын (сонор);
2) яңғырау;
3) һаңғырау.
6. [v] фонемаһы артикуляция (яһалыу) рәүеше буйынса ҡайһы төргә ҡарай?
1) шартлаулы (йомолоусы);
2) ышҡылыулы (ек);
3) ҡалтыраулы.
7. Һәмзә йәки замма фонемаһы артикуляция (яһалыу) урыны буйынса ҡайһы төргә ҡарай?
1) ирен;
2) тел уртаһы;
3) тамаҡ төбө.
8. *Уйын* һүҙен *уйнау* итеп үҙгәрткәндә ниндәй фонетик үҙгәреш барлыҡҡа килә?
1) редукция;
2) протеза;
3) элизия.
9. *Ун биш* һүҙен *умбиш* тип әйткәндә ниндәй фонетик үҙгәреш күҙәтелә?
1) ассимиляция;
2) диссимиляция;
3) метатеза.
10. *Ҡолономдоң ҡойрогон тотоп борҙом* һөйләмендәге һүҙҙәрҙә ниндәй гармония төрө күҙәтелә?
1) аңҡау гармонияһы;
2) ирен гармонияһы;
3) һүҙынҡылар менән тартынҡылар гармонияһы.

**II вариант**

1. Хәҙерге башҡорт алфавитында нисә хәреф бар?
1) 39;
6) 40;
3) 42.
2. [ү] фонемаһы телдең вертикаль торошо буйынса ҡайһы төргә ҡарай?
1) өҫкө күтәрелеш;
2) урта күтәрелеш;
3) түбәнге күтәрелеш.
*3.* [а] фонемаһы телдең горизонталь торошо буйынса ҡайһы төргә ҡарай?
1) алғы рәт;

2) артҡы рәт;
3) урта рәт.
4. [о] фонемаһы ирендәрҙең ҡатнашыу-ҡатнашмауы буйынса ҡайһы төргә ҡарай?
1) иренләшкән;
2) иренләшмәгән;
3) яртылаш иренләшкән.
5. [ғ] фонемаһы тауыш һәм шауҙың ҡатнашыу-ҡатнашмау нисбәте буйынса ҡайһы төргә ҡарай?
1) талғын (сонор);
2) яңғырау;
3) һаңғырау.
6. [й] фонемаһы артикуляция (яһалыу) рәүеше буйынса ҡайһы төргә ҡарай?
1) шартлаулы (йомолоусы);
2) ышҡылыулы (ек);
3) ҡалтыраулы.
7. [һ] фонемаһы артикуляция (яһалыу) урыны буйынса ҡайһы төргә ҡарай?
1) ирен;
2) тел уртаһы;
3) тамаҡ.
8. *Халыҡ* һүҙен *халкы* итеп үҙгәрткәндә ниндәй фонетик үҙгәреш барлыҡҡа килә?
1) редукция;
2) протеза;
3) элизия.
9. *Көнбағыш* һүҙен *көмбағыш* тип әйткәндә ниндәй фонетик үҙгәреш күҙәтелә?
1) ассимиляция;
2) диссимиляция;
3) метатеза.
10. *Бөркөтлөнөң бөйөк бөркөтө* һөйләмендәге һүҙҙәрҙә ниндәй гармония төрө күҙәтелә?
1) аңҡау гармонияһы;
2) ирен гармонияһы;
3) һүҙынҡылар менән тартынҡылар гармонияһы.

### «Һүҙьяһалыш» бүлеге буйынса тест һорауҙары
### I вариант

1. Артыҡ һүҙҙе тап.
1) һөйөнөс; 3) ҡунаҡсыл; 5) айлап.
2) дәртлән; 4) биҙән;
2. *Һөйләүселәргә* һүҙенең тамыры ҡайһы?
1) һөй; 3) һөйләү; 5) һөйләүселәр.
2) һөйлә; 4) һөйләүсе;
3. *Эшсе, ташсы* һүҙҙәре нисек яһалған?
1) ялғау ярҙамында;
2) һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу юлы менән;
3) һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы менән;
4) һүҙҙәрҙе парлау юлы менән;
5) һүҙҙәрҙе ҡабатлау юлы менән.
4. *Студентмын* һүҙендә ниндәй ялғау бар?
1) күплек ялғауы; 3) килеш ялғауы; 5) бер ялғау ҙа юҡ.
2) эйәлек ялғауы; 4) хәбәрлек ялғауы;
5. *Һүҙьяһалыш* тел фәненең ниндәй бүлегенән айырылып сыҡҡан?
1) фонетика; 3) лексикология; 5) фразеология.
2) грамматика; 4) орфография;

6. Тамырҙаш булмаған һүҙҙе билдәлә:
1)аҙай; 3) аҙғын; 5) аҙлыҡ.
2) аҙсылыҡ; 4) аҙһын;
7. Ҡушма һүҙҙәргә инмәгән осраҡты билдәләгеҙ.
1) ижад ит; 3) үҙәк өҙгөс; 5) матур ҡыҙ
2) һирәк-һаяҡ; 4) бишбармаҡ;
8. *Унлыҡ* һүҙе ниндәй юл менән яһалған?
1) лексик-семантик һүҙьяһалыш;
2) фонетик һүҙьяһалыш;
3) морфологик һүҙьяһалыш;
4) лексик-морфологик һүҙьяһалыш;
5) лексик-синтаксик һүҙьяһалыш.
9. Исем яһаусы ялғауҙарҙы билдәләгеҙ.
1)-ла/-лә, -лан/-лән, -ыр/-ер;
2) -лай/-ләй, -лаш/-ләш, -са/-сә;
3) -лы/-ле, -һыҙ/-һеҙ, -сан/-сән;
4)-сы/-се,-ма/-мә, -ғыс/-гес;
5) -ҡай/-кәй, -сыҡ/-сек, -соҡ/-сөк
10. Һүҙҙең артабан бүленә алмай торған иң бәләкәй мәғәнәүи өлөшө нимә тип атала?
1) тамыр; 3) аффикс; 5) нигеҙ.
2) морфема; 4) өн;

## II вариант

1. Артыҡ һүҙҙе тап:
1) дуҫлаш; 3) эҙемтә; 5) мәктәптә.
2) һиҙгер; 4) кәбәнләтә;
2. *Уҡыусыларға* һүҙенең тамыры ҡайһы?
1) уҡ; 3) уҡыу; 5) уҡыусылар.
2) уҡы; 4) укыусы;
3. *БДУ, БР, совхоз* һүҙҙәре нисек яһалған?
1) һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу юлы менән;
2) ялғау ярҙамында;
3) һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы менән;
4) һүҙҙәрҙе парлау юлы менән;
5) һүҙҙәрҙе ҡабатлау юлы менән.
